# ЯКТАШ ШАҒИР ИСЕМЕ МӘҢГЕЛӘШТЕРЕЛДЕ

*Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районында шағир Ҡадир Даян исемендәге премия булдырылды. Һәм уның тәүге еңеүселәре билдәләнде.*

2002 йылда Силәбеләге Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмә якташ шағир Ҡадир Даян исемен мәңгеләштереү буйынса Ҡоншаҡ районы хакимиәте башлығы Ф.С.Иманғоловҡа махсус хат менән мөрәжәғәт иткәйне. Районда башҡорт әҙәбиәтен пропагандалау маҡсатында шағир исемендәге премия булдырыу кәрәклеге етәкселектә яклау һәм хуплау тапты. Һәм 2004 йылдың 11 февралендә, шағирҙың тыуған көнөндә, район үҙәгендә Ҡадир Даян исемендәге премия лауреаттары билдәләнде.

Был тәкдимгә район етәкселеге етди ҡараған һәм милли эштәр уртаһында ҡайнаған ижади шәхестәрҙе билдәләп үтеүҙе кәрәк тип тапкан. Шуға ла башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтен пропагандалауға һәм үҫтереүгә һиҙелерлек өлөш индергән һәләтлеләрҙе баһалау буйынса дүрт номинация булдырылғайны.

Шиғриәт буйынса Ҡоншаҡ ҡасабаһынан балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе, йәш шағирә Светлана Ҡәрипова, журналистика буйынса ”Знамя труда” район гәзитенең штаттан тыш хәбәрсеһе Жәнфидә Ваһапова (Хәлит ауылы), мәҙәни ағартыу эштәре буйынса ”Сағыштыҡай” балалар фольклор төркөмө етәксеһе, уҡытыусы Нәфисә Шакирова (Солтан ауылы), һынлы сәнғәт буйынса рәссам Илдар Юнысов (Хәлит ауылы) еңеүсе тип табылды. Уларҙың һәр ҡайһыһына 5 мең һум аҡсалата премия һәм Маҡтау ҡағыҙы тапшырылды. Нәфисә Ғиҙҙитдин ҡыҙы ”Йыл уҡытыусыһы — 2000” конкурсы еңеүсеһе, бәйгелә ”Өлгөлө дәрес” номинацияһында ла махсус премия яулағайны. Ул йәнә исемен өлгөлө эштәре менән раҫланы, Ҡадир Даян премияһына лайыҡ булды.

Шағирҙың исеме тыуған яғында мәңгеләштерелде.

*Ҡамса МОРТАЗИН,*
*Акмулла исемендәге әҙәби берекмәнең яуаплы сәркәтибе*

## Хөрмәтле ватандаштар!

Мин журналды сыға башлағандан алып, бөгөнгө көнгәсә, бер генә һанын да ҡалдырмайынса, тәфсилләп уҡып барыусыларҙың береһе. Шундай профилле журнал ойошторолоуы бөтә Башҡортостан йәмғәтселеге өсөн оло ҡыуаныс булды инде ул. Ошо ҡыуаныс журналдың тәүге һанынан бөгөнгә тиклем дауам итә. Мин бик ҡәнәғәтмен: журналдың йөкмәткеһе, уҡымлылығы һәр бер һаны һайын юғары кимәлдә килеш һаҡланып килә. Уны шул кимәлдә тотоусы коллективҡа бик ҙур рәхмәт.

*Радик ЗАРИПОВ, Өфө ҡалаһы.*